*Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА*

# МӘҒАРИФҠА БАҒЫШЛАНҒАН ҒҮМЕР

Сәлимйән Ялал улы Ғүмәров 1933 йылдың 8 мартында Башҡортостандың Ейәнсура районында, мәшһүр Сөләймән Абдуллин данлап йырлаған Ҡаҫмарт йылғаһына һыйынып ултырған гүзәл тәбиғәтле Сәғит ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған. Уның балалыҡ йылдары дәһшәтле заманға тура килгән. Бөйөк Ватан һуғышы, аслыҡ, яланғаслыҡ, тиф ауырыуы — барыһын да үҙ башынан кисергән. Ул осор балалары бик иртә тәртә төбөнә егелә, быуындары нығынып та өлгөрмәҫ борон тормош уларҙы ауыр имтихандарға дусар итә.



*С.Ғүмәров ҡатыны Фәнисә, балалары Илгиз, Динара, Азамат менән. 1977 йыл*

Туғыҙ йәштән һабанға ат йәки үгеҙ егеп, иртәнге алтынан киске унға тиклем өс быуа ер һөрә Сәлимйән. Ғәббәс ағаһы менән бер кемгә лә баш бирмәгән «Депутат» һәм «Колчак» тигән ҙур, уҫал үгеҙҙәрҙе икәүләшеп һабанға егәләр. Ике малай шуларға нисек баш булған — һаман аптырап хәтергә ала Сәлимйән ағай. Ҡырҙа ҡыуышта ята-ҡуна йөрөйҙәр. Ашарға көнөнә өс тапҡыр өс бөртөк ярма төшкән шыйыҡ өйрә. Икмәк төҫөн күргән дә юҡ. Өйҙә ашарға картуф ҡына. Шул да ҙур ҡыуаныс. Ҡар иреү менән тау йыуаһы, әтмәкәй, унан һуң имән һәм йүкә бөрөһө, әтлек тамыры... Ә инде көпшә, ҡымыҙлыҡҡа барып етһәң, ул инде туй һыйы, шунан да бәхетле мәл юҡтыр һымаҡ тояһың үҙеңде.

Күрәһең, уларҙы ауыр тормош рухи яҡтан сыныҡтырған һәм ниндәй генә шарттарҙа ла кешелекле булып ҡалыу өсөн ихтыяр көсө, йәшәү

дәрте биргән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Сәлимйән ағайҙың әсәһе Нәғимә инәй, биш балаһын етем ҡалдырып, яҡты донъянан китә. Уның әжәле лә шул ауыр тормош һөҙөмтәһе, сөнки табип булғанда аяҡ шешен дауаларға мөмкин булыр ине. Ә солидол, үлән япрағы һәм тиҙәк ябып ҡына аҙған шеште еңеп буламы һуң? Ғаиләлә иң кесе бала Сәлимйән ун бер генә йәшендә әсәйҙән ҡала.



*К.Дауытов, С.Ғүмәров — гармун менән. 1954 йыл*

Ҙур ғаилә ауыр ҡайғы алдында тағы ла ныҒыраҡ туплана. Аталары Ялал олатай үтә ғәҙел һәм талапсан кеше була. Уның һәр һүҙе балалары өсөн мотлаҡ үтәлергә тейешле ҡанун. Белем алырға форсат сыҡмаһа ла, ифрат зирәк, Ҡөрьән сүрәләрен яттан һөйләй. Уңғанлығы иҫ китәрлек. Ҡул салғыһы менән бесән сапҡанда уның алдына сығырлыҡ кеше табылмаған. Ялал олатай 96 йәшкә тиклем ғүмер итеп, балаларының кеше булыуына һөйөнөп, ейәндәрен һөйөү бәхетен татып, яҡты донъя менән хушлаша. Тәбиғәт менән аралашыу, хеҙмәтте яратыу, эсмәү-тартмау — уның оҙон ғүмеренең сере шундалыр, моғайын. «Атайыма ғүмерем буйы рәхмәтлемен, — ти Сәлимйән Ялал улы. — Грамотаһы «Гумаров» тип ҡултамға һалыуҙан үтмәһә лә, белемдең ҡәҙерен, әһәмиәтен яҡшы аңлар ине. Шуғалыр ҙа, йәш кенә уҡытыусылар менән осрашҡанда ла таҡыяһын һалып, оло ихтирам менән иҫәнләшә торғайны. Бөтә балаларын уҡытырға, белем бирергә тырышты».

Ғүмәровтар ауылда йыр-моңға мөкиббән, һәләтле ғаилә була. Әсәләре Нәғимә инәй башҡорт йырҙарын бик матур йырлаған. Уның моңо балаларына ла күскән. Зәбирйән ағаһы бәләкәй генә сағынан оҫта итеп ҡурай тарта. Йәше-ҡарты уларҙың өйө янына йыйылып, башҡорт көйҙәрен өҙҙөрөп башҡарыуын хайран ҡалып тыңлай. Әйткәндәй, Зәбирйән ағаһы һигеҙенсе синыфта уҡығанда ҡурайсылар бәйгеһендә еңеп, мандолина менән бүләкләнә. Был бүләк Сәлимйәнде лә дәртләндереп ебәрә: ун-ун биш көн эсендә мандолинала уйнарға өйрәнә. Унан бер ағайға утын ҡырҡып, берәр сәғәткә гармунын һорап тора, дәртле итеп гармун тартырға өйрәнеп ала. Хәҙер инде Ялал бабайҙың өйө эргәһенә йәштәр уйынға йыйыла. Артабан егет ике рәтле гармунда ла оҫтара. Әле лә йыр-моңға әүәҫлеген ташламай Сәлимйән Ялал улы. Гармун уйнай, оҫта итеп башҡорт халыҡ көйҙәрен башҡара.

Тормош, ауырмы ул, еңелме — үтә тора. Сәлимйән тыуған ауылында башланғыс мәктәпте тамамлағас, өс саҡырым алыҫлыҡтағы Байыш ете йыллыҡ мәктәбенә бишенсе синыфҡа уҡырға төшә. Дәфтәр юҡ, ҡара

тигән нәмә төшкә лә инмәгән. Ҡоромдан, имән ҡайрыһынан ҡара яһап, китап юлдары араһына яҙалар. Өҫтәүенә, мәктәп һыуыҡ, ҡара туңа ла ҡуя. Ҡара ғынамы, үҙең туңаһың, сөнки аяҡта тишек быйма, өҫтә бер ҡат ыштан да алам-һалам фуфайка.

Уҡыу йылы ла октябрь урталарында, ер туңғас, урып-йыйыу эштәрен теүәлләгәс башлана, яҙ сәсеүгә йәки тырмаға төшөү менән тамамлана. Сөнки колхозда эшләргә кәрәк. Байышта етене тамамлағас, белемгә ынтылған егет 35 саҡырымда ятҡан Абзан ауылында уҡый башлай. Транспорт юҡ, арба юлы ғына. Шәмбе көн дәрестәр бөтөү менән, көҙгө ямғырмы, ҡышын күҙ асҡыһыҙ буранмы, йәйәүләп ҡайтырға кәрәк. Йығылырҙай булып арығанда кеҫә төбөнән икмәк валсығы ғына табып ҡапһа ла хәл инеп киткәндәй була. Ә дүшәмбе көндө, тоғона бер икмәк һалып, таңғы биштән урман-тауҙар аша кире Абзанға юл тота. Ә бит был бер сүрәк икмәкте шәмбегә тиклем еткерергә кәрәк.

Элек ете йыллыҡ мәктәпте тамамлап һигеҙенсе-унынсы синыфтарҙа уҡыр өсөн йылына 150-шәр һум түләргә кәрәк була. Ә Сәлимйән Ғүмәровтың ундай мөмкинлеге юҡ. Мәктәп директоры инә лә: «Сәлимйән, бар ҡайтып кит, класты бушат», — тип ҡыуып сығара. Ә егет сығып киткән була ла, мәктәп мөйөшөндә йәшенеп, директорҙың киткәнен көтөп тора. Шунан йәнә инеп ултыра. Күреп тора, директор ысынлап түгел, закон һәм вазифаһы талап иткәнгә күрә генә ҡыуырға мәжбүр, ә булмышы менән изге күңелле кеше. Егет унынсы синыфты тамамлағас, урман ҡырҡып, 450 һум аҡса эшләй ҙә аттестатын һатып ала. Ни тиклем генә ауыр булмаһын, был йылдар уның күңелендә тәрән эҙ ҡалдырған.

Абзан мәктәбен тамамлағас, Сәлимйән Ғүмәров бер йыл Байышта уҡытыусы булып эшләй. Унан Совет Армияһына саҡырыла. Төркмәнстандың Кушка ҡалаһында өс йылға яҡын сүллектә, саяндар, сүл бүреләре араһында хеҙмәт итә. Армиянан ҡайтҡас, комсомолдың Ейәнсура район комитетында эшләй. Комитетта бер генә ат, ә ҡайһы бер ауылдар район үҙәгенән 120 саҡырым алыҫлыҡта ята. Бына ошо араны арҡырыға-буйға йәйәү йөрөп үтә. Тормошоноң был осорон ул, айырыуса фәһемле булды, тип хәтергә ала. Күп ауылдарҙы бер ҡат үткәс, икенсе килеүен яңылыҡҡа, мәғлүмәткә, ихлас һүҙгә сарсаған йәштәр үҙҙәре йыйылып көтөп тора. Ул заманда «Победа» колхозының рәйесе булып эшләгән Фәүзиә Әбүбәкерова: «Сәлимйән, һин комсомол эше өсөн генә тыуғанһыңдыр. Элек йәштәрҙе йыйып алыу бер бәлә була торғайны. Хәҙер һинең исемеңде ишетеү менән үҙҙәре йүгереп килеп етә. Был ни хикмәт?» — тип ғәжәпләнә. Ҡағиҙә булараҡ, комсомол урындағы етәкселәр менән бер төптән сығып эшләй. Йыйылышты асҡас та, колхоз рәйесе эш, план тураһында һөйләй, киләсәккә бурыстар билдәләй. Ә һуңынан уйын, йыр-бейеү. Әммә Сәлимйән Ялал улын был эш ҡәнәғәтләндереп бөтмәй. Дөрөҫөрәге, ул белеменең наҡыҫлығын аңлай. Ә бит етәкселәр менән, уҡытыусылар менән һөйләшергә кәрәк. Уҡыу

хыялы уны Стәрлетамаҡ педагогия институтына алып килә. Быға са институт тормошонда быңдай хәл булмаған — филология факультетының бер төркөмөндә егерме биш студенттың ун ике-ун өсө армиянан ҡайтҡан, аҡыл һәм тәжрибә туплаған, типһә тимер өҙөрлөк егеттәр. Улар менән институт етәкселәре лә иҫәпләшергә мәжбүр була. Уларҙың төркөмөнөң комсоргы, старостаһы һәм профоргы партияның ҡала комитетына йөрөп, филология факультетында башҡорт төркөмө асыу мәсьәләһен күтәреп сыға.



*«Өс таған» бейеүенә репетиция ваҡыты. Уртала — С.Ғүмәров*

Сәлимйән Ғүмәров студент йылдарында электән мөкиббән яратҡан сәнғәткә тағы ла яҡыныраҡ була. Драма түңәрәгендә ҡатнашып, төрлө спектаклдәрҙә бик күп ролдәр башҡара. «Бажалар»ҙа Бәкер, «Ҡарлуғас»та Шатморат, «Ғәлиәбаныу»ҙа Хәлил, «Ҡыҙ урлау»ҙа Әжмәғол ҡарт образдарын баҙыҡ кәүҙәләндерә. Шул уҡ йылдарҙа «Өс таған»да иң оло ағай булып бейеп, Стәрлетамаҡ ҡала, Стәрлетамаҡ, Ишембай, Салауат зона конкурстарында еңеп, Өфө сәхнәһендә сығыш яһай.

Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлағас, Сәлимйән Ғүмәров, һис икеләнмәй, Байыш мәктәбенә юл тота һәм директор урынбаҫары булып эшләй башлай. Шунда армиянан әйләнеп ҡайтыуын, институтты тамамлауын һағынып көткән һөйгәне Фәнисә менән ғаилә ҡороп ебәрәләр.

Ике йыл эшләгәс, уны Байыш мәктәбенә директор итеп тәғәйенләйҙәр. Ул эшләгән осорҙа бында ике ҡатлы кирбес мәктәп һалына башлай. Күмертау ҡалаһынан килгән төҙөүселәр: «300 саҡырымға урман-тау аша ташыған кирбес хаҡы алтынға бәрәбәр», — тип асыуланып та ҡарай. Әммә мәктәп дан итеп төҙөлә. Дөрөҫ, Сәлимйән ағайға яңы мәктәптә эшләү бәхете эләкмәй. Уны Өфөгә, Башҡортостан уҡытыусыларының белемен камиллаштырыу институтына эшкә саҡыралар. Башта дәреслектәр һәм уҡыу әсбаптары баҫтырыу кабинеты методисты була, һуңынан кабинет мөдире итеп үрләтелә. Был йүнәлештә институтта матур ғына тәжрибә туплана.

Алдынғы тәжрибәне ҡулланыу һәм таратыу маҡсатында, кабинеттың отчетын РСФСР Халыҡ мәғарифы министрлығының милли идаралығында, РСФСР Министрҙар Советының мәктәп һәм уҡыу йорттары бүлегендә тыңлап, ыңғай баһа бирәләр. Был йәһәттән Башҡортостан

Халыҡ мәғарифы министрлығы исеменә (министр Мостафина Фатима Хәмит ҡыҙы булған ваҡыт) рәхмәт әйтәләр.

1971 йылдың 23 авгусында БАССР Халыҡ мәғарифы министры Сабир Шәйәхмәт улы Йыһаншин приказы менән Сәлимйән Ғүмәров «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналының баш мөхәррире итеп тәғәйенләнә. Ул бөгөн дә ошо вазифаны ҙур яуаплылыҡ, оло намыҫ менән башҡара. Журналды ойоштороусы ил уҙамандары, дәүләт эшмәкәрҙәре Т.Сенәкәй, И.Насыри, Ғ.Дәүләтшин, Д.Юлтый традицияларын дауам итеп, Ә.Шоңҡаров, Ә.Ғарипов, Ғ.Ирғалин тәжрибәләрен өйрәнеп, артабан үҫтереү хәстәрлеген күрә. Ул баш мөхәррир булып эшләй башлағанда журналдың тиражы 8739 дана була. Ә бөгөн, 2005 йылдың 1 ғинуарына, журналды алдырыусылар һаны 35517 кешегә барып етте. Был, әлбиттә, эшсән, берҙәм редакция хеҙмәткәрҙәренең фиҙакәр эш һөҙөмтәһе. Фиҙәниә Рәхимова (бөгөн беҙҙең арала юҡ инде), Флүрә Аҙнабаева, Миңнеғәле Ҡунаҡбаев, Камил Яйыҡбаев, Фәүзиә Итбаева, Мөғәллимә Имамова, Нәсимә Ғәйнуллина, Рәмзиә Ғүмәрова, Үзбәк Лоҡманов журналдың йөкмәткеһенә һәм полиграфик яҡтан камиллаштырыуға бик күп көс һалған.


*С.Ғүмәров Сәғит Агиш, Тимер Арыҫлан, Нәжибәк Хафизов һәм башҡалар менән ял ваҡытында*

Сәлимйән ағай ҙа республиканы арҡыры-буйға тиҫтәләр тапҡыр гиҙеп сыҡҡан, уҡытыусылар, мәктәп етәкселәре менән осрашҡан. Уны белмәгән мәктәп директоры, танымаған уҡытыусы бик һирәктер. Хатта ул Ырымбур, Силәбе, Свердловск, Ҡурған өлкәләре уҡытыусылары менән дә осраша, үтенес һәм ихтыяждарын үтәү хәстәрлеген күрә. Сәлимйән Ғүмәров — РСФСР уҡытыусылары съезы делегаты, ике тапҡыр РСФСР Педагогия йәмғиәте съезында Башҡортостан делегаты булып ҡатнаша. Үзбәкстан, Ҡаҙағстан, Эстония, Украина, Белоруссия, Мәскәү, Кемерово, Ҡазан, Калининградта үткәрелгән уҡытыу-тәрбиә эшен камиллаштырыу һәм яҡшыртыу мәсьәләләренә бағышланған кәңәшмәләрҙә ҡатнаша, секция эштәрендә сығыш яһай.

Фиҙакәр хеҙмәте өсөн Сәлимйән Ғүмәровҡа «Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы» тигән маҡтаулы исем бирелгән, РСФСР-ҙың халыҡ мәғарифы отличнигы, Башҡортостандың халыҡ мәғарифы отличнигы билдәләрен йөрөтә. Ул республиканың иң юғары наградаһы — Башҡортостан Республикаһы Юғары Советы Президиумы-

ның Почет грамотаһы менән бүләкләнгән, тиҫтәләгән Маҡтау грамоталарына лайыҡ булған.

Филология фәндәре кандидаты С.Ғүмәров утыҙ йылдан ашыу Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы коллегияһы ағзаһы, Рәсәй Федерацияһы Педагогия йәмғиәтенең Башҡортостан бүлегенең президиумы ағзаһы. Республиканың йәмғиәт тормошонда әүҙем ҡатнаша.

Сәлимйән Ғүмәров «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналында баш мөхәррир булып эшләү ваҡытында йөҙләгән мәҡәләләр яҙған, 500-ҙән ашыу мәҡәләне рус теленән башҡортсаға тәржемә иткән. Күп кенә мәҡәләләре балаларға ныҡлы белем, дөрөҫ тәрбиә биреүгә бағышланған. Тиҫтәләгәндәре мәғарифты ойоштороуҙа район һәм ҡала мәғариф бүлектәре етәкселәренең, мәктәп директорҙарының тәжрибәһен өйрәнеү, уны таратыу маҡсатында яҙылған.

Бынан тыш, Сәлимйән Ғүмәров бәләкәй күләмле хикәйәләр, очерктар яҙа. Мәҫәлән, «Вәғәҙә ташы» хикәйәһе. Уны ауыл халҡы йыйылып уҡып, илашып ултырған хатта. 17 йәшлек егеттәр һуғышҡа китер алдынан йыйылып, ҡыҙҙары алдында исем-фамилияларын ҙур ташҡа яҙа һәм йыуан ағас ботаҡтары араһына күтәреп ҡуя. Уларҙың ҡайһылары һуғыш яланында ҡорбан була, иҫән ҡалғандары шул ташҡа ҡарап дуҫтарын иҫкә ала. «Һикәлтәле яҙмыш», «Әйткән һүҙе — күңел күҙе», «Айгөлдөң алтын дәресе», «Брест ҡаһарманы» (Ришат Исмәғилев ағай хаҡында), «Бала күңеленә юл», «Һин ант иттең...» һәм башҡа мәҡәләләр тәрбиә темаларына яҙылған. «Башҡортостан уҡытыусыһы», «Ағиҙел», «Совет мәктәбе», «Народное образование» журналдарында әҙәбиәт проблемаларына ҡағылған мәҡәләләре донъя күрә.

Сәлимйән Ғүмәров юмористик хикәйәләр, очерктар, шиғырҙар яҙыу менән мауыға. Улар республика гәзиттәрендә даими баҫылып тора.

Әлбиттә, уның мәҡәләләренең төп темаһы — мәғариф. Филология, педагогика буйынса үткәрелгән фәнни-ғәмәли конференцияларҙа ул йыш сығыш яһай, «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналын уҡыусылар менән осрашыуҙар, конференциялар ойоштора, алдынғы педагогик тәжрибәне таратыуҙа журналдың роле хаҡында һөйләй.

Йыйып әйткәндә, «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналын бөгөн Сәлимйән Ғүмәровһыҙ күҙ алдына ла килтереп булмай, сөнки уның 34 йылға яҡын ғүмере ошо баҫма менән бәйле. Журнал уңышлы сыҡһа, ҡыуана, хата китһә, әсе әрнеү кисерә. Бындай хәлдәр баш мөхәррирҙең башынан аҙ үтмәгән, әлбиттә.

«Донъяла төрлө ауырлыҡтар күп булды, әсеһе лә, сөсөһө лә кисерелде, әммә үҙемде бәхетле кеше тип һанайым. Күпме кешегә журнал аша аҡыл, зиһен таратам, нур бөркәм, ғаиләмдән һәм дуҫ-иштәремдән уңдым, республика етәкселәренә оло рәхмәтлемен. Президент, республика Хөкүмәте, туған Мәғариф министрлығы журнал хаҡында оло хәстәрлек күрә. Ә бит мәғариф йәшәһә, уҡытыусылар хаҡында ҡайғыртыу булһа, йәмғиәт тә алға бара. Был — тормош хәҡиҡәте. Беҙҙең республика был йәһәттән өлгө булып торорлоҡ», — ти Сәлимйән Ғүмәров.